# Башҡорт (дәүләт) теле 6 класс.

**Тема**: **Ҡоштар ҡайта. Һандар.**

**Маҡсаттар: Белем биреү:** Р.Янбулатованың “Ҡоштар ҡайта” шиғырының йөкмәткеһен үҙләштереү, грамматик материалды нығытыу, һүҙлек запасын арттырыу;

**Үҫтереүсе:** уҡыусыларҙың фекерләү ҡеүәһен , телмәрен үҫтереү;

**Тәрбиәүи**: уҡыусыларҙың ҡоштар тураһында белемдәрен тәрәнәйтеү, тәбиғәткә, ҡоштарға һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

**Дәрес төрө**: яңы теманы өйрәнеү.

**Уҡытыу методы:** күрһәтеү-аңлатыу, эҙләнеү методтары.

**Уҡытыу алымдары:** әңгәмә, һорау-яуаптар,карточкалар менән эш, таҡтала һәм дәфтәрҙә эш, һүҙлек менән эш, уҡытыусының тасуири уҡыуы, уҡыусыларҙың сылбырлы уҡыуы, ИКТ ҡулланыу, ял минуты.

**Универсаль укыу эшмәкәрлеге:**

**Регулятив:** дәрестең маҡсатын үҙ аллы билдәләү,баһалау.

**Танып белеү:** кәрәкле мәғлүмәтте эҙләп табыу,проблеманы хәл итеү.

**Коммуникатив:** класташтарҙы тыңлау, аңлау, үҙ фекереңде теүәл тапшырыу.

**Планлаштырылған һөҙөмтәләр**:

**Предмет:** уҡытыусы менән берлектә эшләү, бәйләнешле телмәр үҫтереү, һандарҙы практик ҡуллана белеү;

**Метапредмет**: халыҡ ижады, хеҙмәт, тәбиғәтте өйрәнеү фәндәре менән тығыҙ бәйләнештә өйрәнеү.

**Шәхсән:** ижади һәләттәрен үҫтереү, тәбиғәткә, ҡоштарға һаҡсыл ҡараш, кешелек сифаттарын тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** Башҡорт теле дәреслеге 6 класс (Ғәбитова З.М., Усманова М.Ғ), компьютер,мультимедиа проекторы, презентация, һүҙлектәр, ребустар менән карточкалар.

**Дәрес барышы:**

I.Уҡыу эшмәкәрлегенә мотивация булдырыу.

1. Һаумыһығыҙ! Хәйерле көн!

Хәйерле көн теләп, ҡояш ҡалҡа,
Уяналар ауыл, ҡалалар.
Үҙ телемдә һеҙҙе сәләмләйем:
Хәйерле көн һеҙгә, балалар!
Ултырығыҙ!

- Һеҙҙең менән күрешеүемә бик шатмын. Бер-беребеҙгә ҡараныҡ, йылмайҙыҡ, дәресте башлайбыҙ. Һеҙгә уңыштар теләйем. (слайд 1-2)
Дежур уҡыусы датаны, аҙна көнөн, һауа торошон әйтә.

2. Артикуляцион күнегеү.
Ҡыңғырау шылтыраны,
Беҙ ултырҙыҡ дәрескә.
Китап, дәфтәрҙәр әҙер,
Тотонабыҙ беҙ эшкә. (слайд 3)

II. Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу.

Уҡыусылар, беҙ бөгөнгө дәрестең темаһын белер өсөн, кроссворд сисеп алабыҙ.

| | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | | | | | | | | | |
| | | | 2 | | | | | | |
| | | 3 | | | | | | | |
| | | | | 4 | | | | | |
| | | | | 5 | | | | | |
| | | 6 | | | | | | | |

ТӘРЖЕМӘ ИТЕГЕҘ

1.ХОЛОДНО
2.ОБЛАЧНО
3.ХОРОШО
4.ГОРА
5.БЕЛЫЙ
6.СНЕГ

Кроссворд слайдта күрһәтелә, уҡыусылар парлап эшләйҙәр,кроссворд сисәләр. (слайд 4)

-Уҡыусылар, вертикаль буйынса нимә килеп сыҡты? Дөрөҫ, ҡоштар. Тимәк беҙ бөгөн нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ? Дәресебеҙҙең темаһы ниндәй? Дәрестең темаһын уҡыусылар әйтә.

- Эйе, бөгөнгө дәрестә тәбиғәтебеҙгә йәм биреүсе, матурлыҡ өҫтәүсе ҡанатлы дуҫтарыбыҙ – ҡоштар тураһында һөйләшербеҙ.
Элек-электән кешеләр ҡоштар донъяһы менән ҡыҙыҡһынған. Улар һымаҡ бейектә осорға, моңло итеп йырларға хыялланған. Шуға ла халыҡ араһында оҫта йырсыны – һандуғас, ҡыйыу көрәшсене – бөркөт, һылыу ҡыҙҙарҙы – ҡарлуғас, аҡҡош тип йөрөтәләр.

III. Яңы теманы өйрәнеү. Уҡыу мәсьәләһен сисеү.

1. Һүрәттәр менән эш. Таҡтаға ҡош һүрәттәре эленә. (слайд 5-9)
-Һеҙ ниндәй ҡоштарҙы беләһегеҙ?
- Ә былар ниндәй ҡоштар?
Уҡыусыларҙың яуаптары. Дөрөҫ, күсмә ҡоштар.
-Тимәк дәресебеҙҙең маҡсаты ниндәй?
Уҡыусылар дәрестең маҡсатын әйтәләр.
-Һүрәттәргә ҡарап, һүҙлектәр ярҙамында ҡоштарҙың исемдәрен башҡортсаға тәржемә итегеҙ.
Ҡоштарҙың башҡортса исемдәрен табырға кәрәк. Уҡыусылар берәмләп сығып, магнит таҡтаға ҡош исемдәрен йәбештерәләр.
-Афарин, уҡыусылар, ҡош исемдәрен беләһегеҙ икән.

2.Һүҙлек эше. (слайд 10)
-Ҡош исемдәрен һүзлек дәфтәренә яҙабыҙ.
Грач – ҡара ҡарға
Скворец – сыйырсыҡ
Жаворонок – һабан турғайы
Ласточка – ҡарлуғас
Соловей - һандуғас
3. Аудирование.
-Ҡош исемдәрен минең арттан ҡабатлайбыҙ.
Үҙ аллы уҡыйбыҙ.
Рәхмәт, уҡыусылар. Афарин!

4.Дәреслектәге Р.Янбулатованың “Ҡоштар ҡайта” шиғыры өҫтөндә эш.
-Уҡытыусылар, хәҙер мин һеҙгә шиғырҙы укып ишеттерәм, ә һеҙ ихтибар менән тыңлағыҙ.
-Үҙ аллы уҡыйбыҙ.
-Сылбырлап уҡыйбыҙ, тәржемә итәбеҙ.
Шиғыр буйынса һорауҙар:
-Был шиғырҙа ниндәй миҙгел һүрәтләнә?
-Рәғиҙә Янбулатова ҡоштар ҡайтыуын нисек аңлата?
-Был шиғырҙа ниндәй күсмә ҡоштар тураһында һүҙ бара? Эйе, һандуғас, кәкүк тураһында.
-Һеҙ ҡоштарға нисек ярҙам итәһегеҙ? Эйе, дөрөҫ, сыйырсыҡ оялары эшләнегеҙ. 1 апрель Халыҡ-ара ҡоштар көнө. Беҙҙең мәктәптә лә ошо көнгә

бағышланған сара үткәрелде. “Ҡанатлы дуҫтарыбыҙға ярҙам” акцияһында бик күп уҡыусылар ҡатнаштылар. Улар ҡоштарға тағараҡтар, сыйырсыҡ оялары эшләнеләр. (слайд 11-12)

- Балалар, нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн ҡоштарға шундай иғтибар бирелә?

Уҡыусыларҙың яуаптары: Ҡоштар файҙалы. Улар зарарлы бөжәктәрҙе ашайҙар.

Уҡытыусы: Афарин! Дөрөҫ!

**Ял минуты.**

-Хәҙер бер аҙ ял итеп алайыҡ. (слайд 13)

Ҡоштар осто, осто теҙелеп,
Остолар ҙа төштөләр.
Ултырҙылар, ял иттеләр,
Һәм тағы ла остолар.
Остолар, остолар,
Парта артына боҫтолар.

IV. Белемде нығытыу (яңы белемде практикала ҡулланыу)

1. Ҡоштар тураһында ребустар сисеү. (слайд 14)
   -Уҡыусылар, хәҙер ҡанатлы дуҫтарыбыҙ тураһында ребустар сисеп алайыҡ.

## Ҡоштар тураһында ребустар

 +ҒА

 +ЛУ , 

С,  +СЫҠ

2. Ҡоштар тураһында һынамыштар: (слайд 15)
   -Уҡыусылар, халыҡ ижадында ҡоштар тураһында бик күп һынамыштар бар. Бер нисәһен уҡып китәйек.

А) Ҡарғалар ағастың аҫҡы ботағына ҡунһа, ел булыр.
Если вороны садятся на нижние ветки деревьев, будет ветер.

Б) Һайыҫҡан шыҡырыҡлаһа, кеше килә.
Если стрекочет сорока, кто-то придет.

В) Һауала ҡоштар күп осһа, ямғыр яуыр.
Если на небе летают много птиц, то будет дождь.

3. Грамматик теманы ҡабатлау
   -Уҡыусылар, ҡоштарҙың ҡасан килеүе тураһында тексты уҡыйбыҙ, ябай һәм ҡушма һандарҙың яҙылышын аңлатабыҙ. (слайд 16)
   25 мартта - сыйырсыҡтар, 28 мартта – һабан турғайҙары, 26 апрелдә – ҡарлуғастар, 6 майҙа һандуғастар килә.

V. Өйгә эш: (слайд 17)
1.“Ҡоштар ҡайта” шиғырын тасуири уҡырға.
2. 3-сө күнегеү, 82-се бит (һандарҙы алфавиттағы хәрефтәрҙең урынлашыу тәртибенә ҡарап, һөйләмде яҙырға)
3.Үҙеңә оҡшаған ҡош һүрәтен эшләргә.

VI.Рефлексия. Баһалау. Дәресте йомғаҡлау.
-Уҡыусылар бөгөн дәрестә нимә тураһында белдегеҙ?
- Ниндәй ҡоштарҙы өйрәндек?
- Алған белемдәрегеҙ тормошта кәрәгәсәкме?
-һеҙгә дәрес оҡшанымы?
-Үҙегеҙгә ниндәй баһа ҡуйыр инегеҙ?
Үҙ баһа, уҡытыусының баһаһы.
Афариндар! Дәрес өсөн рәхмәт!
Һеҙгә уңыштар теләп ҡалам. Һау булығыҙ!